**Муниципальное общеобразовательное автономное учреждение
средняя общеобразовательная школа №10
«Центр образования»
городского округа город Нефтекамск
Республики Башкортостан**

| | | |
|---|---|---|
| **Рассмотрено**<br>**на заседании ШМО**<br>**Руководитель ШМО**<br>**_______ / Абсахова Э.З.**<br>**Протокол № 1 от 29.08.2016г.** | **Согласовано**<br>**заместитель директора**<br>**по учебной работе**<br>**________/ Садрисламова А.А.**<br>**Протокол № 1 от 31.08.2016 г.** | **Утверждено**<br>**Директор**<br>**_______/ Акмалтдинова Н.Х.**<br>**Приказ № 538**<br>**от 31.08.2016 г.** |

# РАБОЧАЯ ПРОГРАММА
**основного общего образования
по башкирскому языку
(базовый уровень)
для 8 а, б, в, г, д классов
на 2016-2017 учебный год**

**Составители:**

**Тимергазина А.Р., учитель башкирского языка и литературы МОАУ СОШ №10 «Центр образования»**

**Абсахова Э.З., учитель башкирского языка и литературы МОАУ СОШ № 10 «Центр образования»**

**Нефтекамск, 2016**

**Аңлатма яҙыуы**

Башҡорт теле - башҡорт халҡының туған теле һәм Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булып һанала.
Башҡорт теленең метапредмет белем биреү функцияһы мәктәптә белем алыу процесында бала шәхесен формалаштырыуҙа «Башҡорт теле» предметының универсаль, дөйөмләштереү характерын билдәләй. Башҡорт теле баланың фекер үҫешенә булышлыҡ итә; белем һәм күнекмәләрҙе үҙ аллы үҙләштереү һәләттәрен үҫтерә, шулай уҡ уҡыусыларҙың үҫтереүсе уҡыу эшмәкәрлеген ойоштора. Башҡорт теле башҡорт мәҙәниәтен өйрәнеүгә нигеҙ булып тора һәм башҡорт әҙәбиәтенең рухи тел байлығын үҫтереүгә булышлыҡ итә; уҡыусыларҙы кешелектең мәҙәни тарихи тәжрибәһенә ылыҡтыра. Киләсәктә төрлө белемде үҙләштереү һәм һаҡлау формаһы булараҡ, башҡорт теле бөтә предметтар менән тығыҙ бәйләнештә тора һәм профессиональ күнекмәләрҙе үҙләштереү сифатына йоғонто яһай. Аралаша белеү, шул һөҙөмтәлә уңыштарға өлгәшеү, юғары профессиональ һәм социаль әүҙемлек шәхес тормошоноң төрлө әлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын билдәләүсе характеристикаһы булып тора. Телдәрҙе өйрәнеү баланың төрлө тормош ситуацияларында тәрбиә-этик нормаларын формалаштырыу нигеҙе; үҙ ҡылыҡтарына дәлилле баһа биреү мөмкинлеген үҫтерә.

### Эш программаһы нигеҙләнгән хоҡуҡи-норматив документтар

Был эш программаһында Федераль һәм Республика закондары талаптары тормошҡа ашырыла: «Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында» Законы, 2012 йылдың 29 декабрендә ҡабул ителгән Рәсәй Федерацияһының «Мәғариф тураһында» Законы (№ 273-ФЗ), 1999 йылдың 15 февралендә ҡабул ителгән «Башҡортостан халыҡтары телдәре тураһында» Законы, Башҡортостан Республикаһының «Мәғариф тураһында» Законы.
Башҡортостан Мәғариф Министрлығы тарафынан тәҡдим ителгән программа Башҡортостан Республикаһы Нефтекама ҡалаһы “Белем биреү үҙәге” 10-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбе муниципаль дөйөм белем биреү учреждениеһының “Уҡыу планы”на ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыла.

### Башҡорт телен уҡытыу маҡсаттары:

1. Башҡорт теленә ҡарата һөйөү, мәҙәниәт күренеше булараҡ, уға ҡарата аңлы ҡараш тәрбиәләү, телдең төп аралашыу, кеше эшмәкәрлегенең төрлө сфераһынан белем алыу ҡоралы булыуын, йәмғиәттә ҡабул ителгән әхләк-этик нормаларҙы үҙләштереү сараһы булыуын аңлау, башҡорт теленең эстетик ҡиммәттәрен үҙләштереү.
2. Көндәлек тормошта һәм уҡыу эшмәкәрлегендә башҡорт телен аралашыу сараһы булараҡ үҙләштереү; үҙ-ара аңлашыу һәм үҙ-ара фекер алышыуға һәләтлелекте үҫтереү; үҙ телмәреңде камиллаштырыу; мөһим төп уҡыу белемен һәм универсаль уҡыу хәрәкәттәре (эшмәкәрлектең маҡсаттарын аныҡ итеп әйтә белеү, уны планлаштырыу, библиографик эҙләнеү үткәреү, төрлө типтағы лингвистик һүҙлектәрҙән һәм сығанаҡтарҙан киң мәғлүмәт саралары һәм Интернеттан тейешле мәғлүмәтте алыу һәм эшкәртеү һ.б.)
3. Тел системаһы төҙөлөшөн һәм уның хәрәкәттә булыу законлығын үҙләштереү, стилистик ресурстарҙы һәм төп әҙәби тел нормаларын күҙәтергә өйрәнеү; анализлау, сағыштырыу, классификациялау һәм тел факттарын баһалау һәләттәрен үҫтереү; яҙма һәм һөйләү телмәрен, телмәр эшмәкәрлеге төрҙәрен, аралашыуҙың төрлө ситуацияларында телде ҡулланыу ҡағиҙәләрен, телмәр этикет нормаларын, актив һәм потенциаль һүҙлек запасын байытыу; телмәрҙә грамматик сараларҙы ҡулланыу күләмен киңәйтеү; белемде, күнекмәне аралашыу процесында уҡыу эшмәкәрлегендә һәм көндәлек тормошта ҡулланыу һәләтлеген камиллаштырыу.

### Программала ҡуйылған маҡсат һәм бурыстар.

1. Уҡыусыларҙы башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәтеү.
2. Башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем һәм күнекмәләр биреү.
3. Башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлау күнекмәләрен биреү.

4. Үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен формалаштырыу.
5. Телде өйрәнеү барышында балаларҙы башҡорт халҡының фәһемле тарихы, бай мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте һ. б менән таныштырыу, уларҙы башҡорт донъяһына алып инеү, башҡорт халҡына, уның теленә, үҙе йәшәгән төйәккә ихтирам һәм һөйөү тәрбиәләү.
6. Бөтә һаналғандарға таянып, рус һәм башҡорт телдәрен, әҙәбиәтен өйрәнеү нигеҙендә, балаларҙа туған телгә ихтирам тәрбиәләү, уларға илһөйәр һәм интернациональ тәрбиә биреү.
Башҡорт теленә өйрәтеү буйынса 7 - се класс уҡыусылары алдында түбәндәге бурыстар ҡуйыла:
- башҡорт әҙәби телендә дөрөҫ һөйләшергә, өйҙә, йәмәғәт урындарында, хеҙмәт процесында башҡорт әҙәби телен практик файҙаланырға өйрәнеү.
- башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик нормалары буйынса белем дәрҙе арттырыу
- башҡорт телендә нәшер ителә торған гәзит-журналдарҙы, әҙәби китаптарҙы үҙ аллы уҡып аңлаукүнекмәләрен үҫтереү.
- үҙ фекереңде билдәле кимәлдә бәйләнешле итеп һөйләй һәм яҙа алыу күнекмәләрен үҫтереү.
- башҡорт халҡының тарихы, мәҙәниәте, сәнғәте, әҙәбиәте, башҡорт йолалары, күренекле шәхестәре, тыуған илдең тәбиғәте һ. б менән танышыу.

**Программа тураһында мәғлүмәт**

Эш программаһы уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 1 – 11 кластары өсөн “Башҡорт теленән  программа”ға ярашлы рәүештә төҙөлгән.
Программа 2008 йылда Ижевск ҡалаһында “Книгоград” типографияһында баҫтырылған.
Программаны 1 - 4 кластар өсөн Х. А. Толомбаев һәм М. С. Дәүләтшина, 5 – 11 кластар өсөн З. М. Ғәбитова һәм М. Г. Усманова төҙөгән.

**Уҡыу предметының  әһәмиәте**

Тәҡдим ителгән программа башҡорт телен өс йүнәлештә өйрәнеүҙе - башҡортса телмәр эшмәкәрлеген формалаштырыу һәм камиллаштырыу, башҡорт теленең фонетик, лексик, грамматик үҙенсәлектәрен аңлау һәм үҙләштереү, бәйләнешле текст менән эш итә белергә өйрәтеүҙе күҙ уңында тота. Шулай уҡ милли тәрбиә тураһында ла проблема күтәрелә. Юғары кластарҙа тел менән әҙәбиәтте тәрәнерәк кимәлдә өйрәнеү ҡарала.

**Программаның методик нигеҙҙәре.**

Рус мәктәптәрендә башҡорт теле һәм уҡыу (юғары кластарҙа - әҙәбиәт) программаһы дөйөм педагогик (методик) талаптарға, принциптарға нигеҙләнә.
Улар түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:
- өйрәнелгән материалды анализлау, сағыштырыу, предметтарҙы ниндәйҙер билдәләре буйынса классификациялау, дөйөмләштереү;
- предметтарҙың төп үҙенсәлектәрен айыра, аңлата белеү;
- предметҡа, күренешкә ҡарата үҙ фекереңде әйтә һәм уны иҫбатлай белеү;
- уҡыусыларға әхлаҡи һәм эстетик тәрбиә биреү;
- уҡытыуҙы коммуникатив йүнәлештә алып барыу;
- башҡорт теле системаһының бөтөн кимәлдәрен (фонетик, лексик, морфологик, синтаксик, стилистик, пунктуацион) иҫәпкә алыу һәм практик файҙаланыу;
- телмәр эшмәкәрлегенең бөтөн төрҙәре өҫтөндә эшләү;
- бүтән телдәрҙең башҡортса һөйләү һәм яҙыу телмәренә йоғонтоһон иҫәпкә алыу;
- башҡорт теленә балаларҙы үҙҙәре һөйләшкән телгә нигеҙләнеп өйрәтеү;
- предмет-ара бәйләнеш, тарих, сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт, халыҡ ижады һәм традицияларына нигеҙләп өйрәнеү.

**Уҡыу предметының уҡыу планындағы урыны**

Башҡорт теле 8 кластарҙа аҙнаһына 2 сәғәт, йылына 70 сәғәт укытыла. Сәғәттәр һаны иҫәбенә кластан тыш уҡыу, контроль диктант, инша, изложение яҙыу ҙа инә.

**Уҡыу процесын ойоштороу формалары:**
* Дәрес-консультация
* Практик дәрестәр
* Эшлекле уйындар
* Ярыш дәрестәре
* Компьютер дәрестәре
* Төркөмдәр менән эшләү
* Ижади дәрестәр
* Дәрес конкурстар
* Әңгәмә дәрестәре
* Дәрес уйындар
* Дәрес конференциялар
* Дәрес семинарҙар
* Интеграцияланған дәрестәр
* Предмет – ара дәрестәр
* Дәрес экскурсиялар

**Тел укытыу технологиялары**

* Хеҙмәттәшлек технологияһы
* Проблемалы уҡытыу
* Үҫтереүсе уҡытыу технологияһы
* Проектлау технологияһы

**Яҙма эштәрҙең төрҙәре, күләме һәм уларҙы баһалау нормалары**

Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теленән яҙма эштәрҙең төрлө формалары ҡулланыла.

Яҙма эштәрҙең киң ҡулланыла торған түбәндәге төрҙәрен күрһәтергә була:

- һүҙҙәрҙе, типик фраза һәм һөйләмдәрҙе күсереп яҙыу;
- һүҙлек диктанты;
- ғәҙәти диктанттар;
- һорауҙарға яуаптар яҙыу;
- изложениелар;
- иншалар;
- тестарға яуаптар яҙыу.

Һаналған яҙма эштәр элементар характерҙа, өйрәтеү маҡсатында һәм ныҡлы әҙерлектән һуң ғына яҙҙырыла. Әҙерлек эштәре төрлөсә булырға мөмкин: һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыр алдынан бер нисә тапҡыр телдән әйттереү, ниндәй хәрефтәр яҙылыуын анализлау (әйттереү), һүҙҙәрҙе һауала, таҡтала яҙып ҡарау, таҡтала яҙылғандарҙы күмәкләп тикшереү, хаталарын төҙәтеү һ.б. Фәҡәт ошондай һәм шуларға оҡшаш әҙерлек эштәре башҡарылғас ҡына, контроль эштәр дәфтәренә яҙыла.

Контроль характерҙағы яҙыу эштәренең күләме уҡыу йылы эсендә түбәндәгесә тәкдим ителә:

Диктант - 3
Изложение - 2
Иншалар – 2

Өйрәтеү характерындағы яҙыу эштәре, һүҙлек диктанттары ғәҙәттәге дәрестәрҙә үткәрелә. Уларҙың күләмен билдәләү укытыусы ҡарамағына калдырыла.

Яҙма эштәргә (бигерәк тә изложениелар менән иншаларға) икешәр сәғәт вакыт биргән осраҡтар була. Бындай сакта яҙыу ваҡытын укытыусы үҙенсә билдәләргә хоҡуҡлы.

Уҡытыу рус телендә барған мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәре лә, яҙма эштәр үткәреү методикаһы ла бик үҙенсәлекле. Шуға ла яҙма эштәр, уларға ҡуйылған баһалар балаларҙын телгә өйрәнеүендә дәртләндереү сараһы булып хеҙмәт итһен (һәр хәлдә шуға ынтылырға кәрәк), балаларҙа

башҡорт телен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятһын. Икенсенән, укыусыларҙың белем һәм күнекмәләр күләме, сифаты башҡорт теленән дәүләт стандарттарына яуап бирергә тейеш. Өсөнсөнән, шул ук күрһәткестәр укытыусыларға аттестация үткәргәндә лә иҫәпкә алына.

## VIII класс укыусыларының белем һәм күнекмәләренә талаптар

1. Художестволы, фәнни-популяр һәм публицистик текстарҙы
ҡысҡырып етеҙ уҡыу;
- художестволы әҫәрҙәрҙе тасуири уҡыу;
- ҙур булмаған хикәйәләрҙе йәки уларҙың өҙөктәрен дөрөҫ һөйләп биреү;
- хикәйәләрҙе, әкиәттәрҙе инсценировкалау.

2. Өйрәтелгән әҫәрҙәрҙең авторын, исемен, мәғәнәһен белеү;
- өйрәнелгән әҫәрҙәрҙең төп темаһын аңлау;
- программа тарафынан ятлау өсөн тәҡдим ителгән әҫәрҙәрҙең текстарын яттан белеү;
- 10-12 шиғырҙы яттан тасуири һөйләй белеү.

3. Яҙыусы һүрәтләгән художестволы картиналарҙы уй менән күҙ алдына баҫтырыу;
- текстың планын төҙөү;
- текстың йөкмәткеһен план буйынса һөйләү, билдәле ситуацияла йөкмәткене ижади дауам итеү.

4. Төрлө тип һөйләмдәрҙә тыныш билдәләрен ҡуя белеү;
- һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәрен айыра белеү;
- үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәре; һүҙ төркөмдәре булараҡ исем, сифат, һан, теркәүес, тураһындағы белешмәләр;
- үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙ төркөмдәрен айыра белеү;
- контроль диктанттар, изложение, иншалар яҙыу.

## Укыу материалының йөкмәткеһе

### Мәктәпкә барабыҙ (9 сәғәт)

Был тема буйынса 5-7-се кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау, артабан һүҙлек байлығын арттырыу. Уҡыусыларҙы тема буйынса тулы текст төҙөп, эҙмә-эҙлекле һөйләргә, мәктәп, класс тормошо хаҡында ҡыҫҡа ғына хикәйә төҙөргә өйрәтеү. Текст өҫтөндә эшләү, план төҙөү, план буйынса һөйләү. Мәктәп, тыуған төйәк, класс һ.б хаҡында әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу, экскурсиялар, осрашыуҙар ойоштороу. Алған тәьҫораттар буйынса уҡыусыларҙы бер-береһе менән фекер алышырға өйрәтеү.

Грамматика:
5-7-се кластарҙа үткән материалдарҙы иҫкә төшөрөү.
Һөйләмдә һүҙҙәр тәртибе.
Өндәрҙе дөрөҫ әйтеү.

Укыу материалы:
Р.Ғарипов. Туған тел.
К.Кинйәбулатова. Мәктәпкә барабыҙ.
Р.Ниғмәтуллин. Тырышлыҡ.
Б.Бикбай. Туған тел.
Б.Рафиҡов. Илем Башҡортостаным.
С.Фәбиҙуллин. Йәшлек дуҫым.
Башкорт халык әкиәте. Зирәк куян.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Ғүмер, шатлык, һағыш, туғай, көн, көс, рәхәт, ҡәҙерле, якын, бөйөк, тоғро, бейек, сабый, күкрәк, һөт, ризык, ашамлыҡ, саф, шишмә, мөхәббәт, һөйөү, яратыу, ғәжәпләнеү, һаман, хак, дөрөҫ, мөрәжәғәт итеү, һуңғы, аҙакҡы, якшы, заман, дәрт, ихлас, тауыш.
Диалог темалары:
Һаумы, мәктәп!
Кем, ҡайҙа каникул вакытын үткәргән?
Ауыл, ял, хеҙмәт, яңы дуҫтар.

Яңы укыу йылы менән котлау.
Йәйге хәтирәләр.
Мәктәп яңылыктары.
Беренсе укыу көнө калдырған тәьҫораттар.

**Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр (9 сәғәт)**

Көҙ, көҙгө күренештәр тураһында ентекле итеп һөйләү, белгәндәргә өҫтәп яңы мәғлүмәт биреү. Тәкдим ителгән тема буйынса текстар укыу, шулай ук муллык, хеҙмәт тураһында яңы мәкәл, әйтемдәр менән танышыу. Кеше тормошонда хеҙмәттең роле, көҙгө эштәр нимәнән ғибәрәт икәнлеген укыусыларға аңлатыу, ололар һәм балаларҙың хеҙмәте тураһында укыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү.

Грамматика:
Синтаксис.
Әйтелеү максаты буйынса һөйләм төрҙәре.
Логик баҫым.
Исем менән кылымды кабатлау.

Укыу материалы:
Ф.Ғөбәйҙуллина. Көҙ.
С.Муллабаев. Көҙгө урман.
Т.Мөхәмәтколов. "Кыйыулык.
З.Ханнанова. һөт.
А.Игебаев. Тәмленең дә тәмлеһе.
Ә.Әхмәт-Хужа. Кояш.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Тәбиғәт, яманһыу, япрак, осоу, осоусы коштар, торна, күңелле, һағышлы, моң, моңайыу, болот, шәл, толом, батыр, яланаяк, донъя, сабыр, шифалы, хуш еҫ, кайғы-хәсрәт, мәшһүр, рәссам, кырау, төньяк, көньяк, түшәк, яланғас, көрт, кар көртө, тейен, бәшмәк, уҫак, кайғы,төлкө.

Диалог темалары:
Көҙ билдәләре.
Көҙгө эштәр.
Көҙгө тәбиғәт (ауыл йәки кала).
Ололарға хөрмәт.
Көҙгө муллык (икмәк, уңыш, йәшелсә, еләк-емеш, бәшмәк һ.б.).
Баксала көҙгө эштәр.

**Өфө менән танышыу (8 сәғәт)**

Өфө - Башкортостандың баш калаһы. Өфө ҡалаһы, уның үткәне һәм хәҙергеһе тураһында әңгәмә үткәреү. Өфө ҡалаһының иҫтәлекле урындары тураһында һөйләшеү, экскурсия үткәреү. Уҡыусыларыбыҙ Башҡортостаныбыҙҙың баш ҡлаһы тураһында һөйләй белергә тейеш. Бының өсөн бик күп эш төрҙәре талап ителә.

Грамматика:
Башкорт ҡылымдарының төҙөлөшө.
Барлыҡ төшөнсәһе һәм уның бирелеше.

Укыу материалы:
Й.Солтанов. Өфө - беҙҙең баш ҡалабыҙ.
Н.Дәүли. Өфө ни өсөн матур?
Л.Ахметкужина. Башкорт лимондары.
_ Р.Янбулатова һүҙҙәре, Х.Әхмәтов музыкаһы. Өфө - баш ҡалам. (Йыр).
Ғ.Аллаяров. Хинган тауҙары аша.
Д.Әхиәрова. Орджоникидзе районы.
Ҡ. Даян һүҙҙәре, М.Вәлиев музыкаһы. Матур Өфө ҡалаһы. (Йыр).

Авторҙар тарафынан был темаға ҡулайлаштырып төҙөлгән текстар:
Мин театрға барҙым.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Баш ҡала, сәйәхәт, театр, музей, бөйөк, тарих, ғорур, ғорурланыу, ғорурлыҡ, элек, хәҙер, ғәйрәт, һәйкәл, йорт-музейы, һын, һынлы сәнғәт, мәҙәниәт, мәғариф, аҡ йорт, уҡыу үҙәге, дауа, үҙәк музей, тыуған яҡты өйрәнеү музейы, Өфөләге заводтар, ҡунаҡхана, уҡыу йорто, баҙар, өфөләр, мәҙәниәт һарайы, Имәнҡала.
Диалог темалары:
Республиканың баш ҡалаһы тураһында.
Өфө ҡалаһы менән танышыу.
Салауат Юлаев һәйкәле янында.
Театрҙа.
Музейҙа.
Паркта.
Уҡыу йорттары.

## Хеҙмәт төбө - хөрмәт (9 сәғәт)

Уҡыусыларға теманың асылына төшөндөрөү. Кеше тормошонда хеҙмәттең роле тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Данлыҡлы хеҙмәт ветерандары, үҙ эшенең оҫтаһы булған кешеләр менән осрашыуҙар ойоштороу. Уҡыусыларҙың үҙҙәре һайлаясаҡ һөнәр тураһында белгәндәрен һөйләтеү, яңы мәғлүмәттәр биреү. Республикабыҙ кешеләренең хеҙмәте, балаларҙың ололарға ярҙамы, һөнәрҙәр тураһында шиғырҙар, хикәйәләр уҡыу. Хеҙмәт, һөнәр тураһында мәҡәлдәр өйрәнеү.

Грамматика:
Ябай һөйләм.
Һөйләмдең баш киҫәктәре.
Эйә менән хәбәрҙең ярашыуы.
Юҡлыҡ, булмағанлыҡ төшөнсәләре.

Уҡыу өсөн әҫәрҙәр:
В.Моратов. Башҡорттар әрме хеҙмәтендә.
А.Насиров. Көслө сабаҡ.
А.А.Плешаков. Хайуандар нисек яраҡлашҡан?
Н.М.Бадридзе. Зарядкаға баҫ!
Башҡорт халыҡ әкиәте. Алданған бүре.
Н.Исламғолова. "Кышҡы биҙәктәр.
Ә.Атнабаев. "Кара икмәк.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Наҙлы, яғымлы, әхирәт, хөрмәт, данлыҡлы, баһалау, оло ихтирам, һөнәр һайлау, ярҙам, һоҡланыу, ҡәнәғәт, айран, мәтрүшкә, эшсән, арымай-талмай, дан тотоу, маҡтаулы исем, хеҙмәт ветераны, иген яланы, тырышлыҡ, үҙ эшенең оҫтаһы, хеҙмәт.
Диалог темалары:
Һинең төп эшең нимә? Уны нисек аңлайһың?
Атай-әсәйең ниндәй эштә эшләйҙәр?
Үҫкәс һинең кем булғың килә?
Ни өсөн?

## Ҡыш (12 сәғәт)

Өйрәнелгән һүҙҙәрҙе контекст эсендә дөрөҫ ҡулланыу, стилистик яҡтан төҙөк итеп үҙ телмәрендә ҡулланырға өйрәтеү. "Кыш миҙгеле тураһында белгәндәр системалаштырыла, һүҙлек байлығын арттырыу өҫтөндә ентекле эш алып барыла. Яңы йылға, ёлкаға әҙерләнеү, уны үткәреү хәстәрлектәре тураһында һөйләшеү.
Ҡыш тураһында текстар, мәҡәлдәр, һынамыштар уҡыу.

Грамматика:
IV темала үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ.

Укыу материалы:
С.Хажиев. Ноябрь-ҡышҡа инеү айы.
Н.Нәжми.Ҡыш.
С.Әлибаев. Ҡышҡы урман. (Ятларға).

Е.Кучеров. Бураны ла, тамсыһы ла булыр,

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Епшек ҡар, еүеш, иҫке, яңы, "Кыш бабай, Ҡарһылыу, яра, йәрәхәт, киҫәк, гөнаһ, үс, юл, юлдаш, баҫма, тәбрикләү, боҙбармаҡтар, һый, туңған ер, әсе елдәр, аҙыҡҡа ҡытлыҡ кисереү, айырым, теләк, өмөт, күңел, серле донъя, сафлыҡ, ҡыйыу атлау, ғәзиз ерем.

Диалог темалары:

Яңы йыл менән ҡотлау.

Шыршы ағасы.

Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу.

Шыршы янында.

Ғаиләлә Яңы йыл байрамы үткәреү.

Яңы йылға бағышланған йырҙар, мәҡәл һәм әйтемдәр.

Башҡа ерҙә (ҡалала, ауылда, башҡа республикала йәшәүсе) яҡын кешеләргә Яңы йыл менән ҡотлау формаһында хат яҙыу, открытка тултырыу.

Уҡытыусы һайлаған текст буйынса изложение яҙыу.

## Салауат Юлаев - халҡыбыҙҙың милли батыры (5 сәғәт)

Салауат Юлаевтың биографияһы, ижады менән танышыу. Салауат Юлаев- башҡорт халҡының легендар батыры һәм сәсән шағиры. Уның шиғырҙарының һаҡланыу тарихы тураһында әңгәмә үткәреү. Салауат Юлаевтың тормошо, батырлығы, ижады тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү.

Грамматика:

Һөйләмдең эйәрсән киҫәктәре тураһында төшөнсә.

Аныҡлаусы.

Уҡыу материалы:

С.Юлаев шиғырҙары менән танышыу: Тыуған илем. (Ятларға).

Рәссамдар ижадында С.Юлаев образын кәүҙәләндереү (А.А.Кузнецов «Салауаттан һорау алыу»).

С.Юлаев тураһында белешмә.

Б.Вәлид. Салауат маршы.

С.Юлаев һәйкәле тураһында белешмә.

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Яу, уҡ, ғорур, мәғрур, һын, дан, дошман, нәфрәт, енәйәтсе, асыу, баш эйеү, сәсән, шәхес, тарихи шәхес, бәйләүән, телмәр, шағир, азатлыҡ өсөн көрәш, батырлыҡ, кешелеклек, ҡорал, әсир, ҡәлғә, тирмә, бығау, Крәҫтиән һуғышы, тышау, ҡыйыу, ғәләм, изге ер, яҙмыш.

Диалог темалары:

Салауат Юлаев - халыҡ батыры.

Салауат Юлаев һәйкәле янында.

Салауат мәмерйәһе.

Салауат Юлаев эҙҙәре буйлап.

Палдискиҙа Салауат Юлаев иҫтәлектәре.

## Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! (6 сәғәт)

Яҙ миҙгеле тураһында белгәндәрен системалаштырыу, яңы мәғлүмәттәр менән уҡыусыларҙың телмәрен тулыландырыу. Яҙғы байрамдар - 1 Май һәм Еңеү байрамы тураһында һөйләшеү, текстар уҡыу. Яҙ темаһын үҙ ижадында асыусы шағир, яҙыусылар менән танышыу, улар тураһында уҡыусыларҙан һөйләтеү. Яҙғы тәбиғәт күренештәре, ҡоштарҙы ҡаршылау, бүлмә гөлдәре үҫтереү, баҡса эштәре тураһында әңгәмәләр үткәреү, һөйләшеү.

Грамматика:

Тултырыусы.

Уҡыу материалы:

Г. Яҡупова. Өмөтлө яҙ.

К.Кинйәбулатова. Йырлай-илай еңеү яуланыҡ. Гәзит материалы. Тәүге космонавт. Р.Ниғмәти. Ватан. (Ятларға).

Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Гөрләүек, бөрө, сыйырсыҡ, ҡара ҡарға, уяныу, умырзая, киң, киңлек, шатлыҡ, ярҙам итеү, дауыл, яуыз, усал, ныҡлап, ентекләп, оҡшатыу, тыйнаҡ, күк, ямғыр, йәшен, болот, ҡыйыҡ, тамсылар, мәңгелек ут, файҙа, ҡаршы алыу, ҡанатлы дуҫтар.
Диалог темалары:
Яҙҙың беренсе билгеләре.
Ҡара ҡарғалар.
Сыйырсыҡ.
Яҙғы эштәр.
1 Май - яҙ, сәскәләр, йәшлек, хеҙмәт байрамы.
Еңеү байрамы. Нимәләр белергә? Еңеү байрамы тураһында ниндәй китаптар уҡыу, фильм йәки спектаклдәр ҡарау, һәйкәлдәрҙең нимә тураһында иҫкә төшөрөүҙәре.
«Яҙҙың бер көнө йыл туйҙыра» тигән темаға инша яҙыу.

**Беҙ ҡайтырбыҙ йондоҙҙарға әүерелеп... (4 сәғәт)**

Башҡорт халҡының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһарманлығы. Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарына.батырҙарына ҡарата ихтирам, ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү. "Кала, район, ауылдың данлыҡлы кешеләре менән хәтер кисәләре, осрашыуҙар үткәреү, уҡыусылар сараларҙа актив ҡатнашырға тейеш.
Грамматика:
Хәл.
Уҡыусыларға һүҙлек менән эшләү күнекмәләре үткәреү.
Уҡыу материалы:
С.Әлибаев. Сәскәле йәй.
Гәзит материалы,
Һалдат тора киләсәкте тотоп.
С.Ғибәҙуллин. "Котлайым мин.
М.Харис. Хат. (Ятларға).
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:
Батыр, батырҙарса, дан, тыныслыҡ, хәтер кисәһе, яу, ғорурлыҡ, азатлыҡ, көрәш, иҫтәлек, һәләк булыу, иҫкә алыу.
Диалог темалары:
Һуғыш ветерандары менән осрашыу.
Кем ул Шайморатов генерал?
Шәкирйән Мөхәмәтйәнов - башҡорт егете.
Беҙҙең батырҙар.

**Ай Уралым, Уралым ... (8 сәғәт)**

Башҡортостан, уның үткәне, бөгөнгөһө хаҡында әңгәмә үткәреү. Республиканың күренекле урындары менән таныштырыу, улар тураһында уҡыусыларҙы һөйләргә өйрәтеү. Үҙ төбәгендәге күренекле урындар, уларҙың легендалары хаҡында һөйләтеү. Башҡортостанда йәйге тәбиғәт, ололарҙың һәм балаларҙың йәйге эштәре, ялы тураһында диалог һәм монологтар төҙөү.
Грамматика:
8-се класта үтелгәндәрҙе ҡабатлау.
Уҡыу материалы:
И.Хужин. Тыуған ерем биҙәктәре.
В.Исхаҡов. Талпан.
Т.Нечаева. Скульптурҙың бөйөк эше.
Р.Бикбаев. Уралыма.
М.Кәрим. Тыуған ил тураһында уйланыу.
Р.Ниғмәтуллин. Башҡортостан.
З.Биишева. Йәшәү - хеҙмәт. (Ятларға).
Р.Бикбаев. Уралыма.
Һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр:

Мәғрүр, Урал, аяҙ, болотло, таң, иртә, көндөҙ, емелдәү, миләш, муйыл, болон, баҫыу, ҡыр, ялан, ҡыуаҡ, ағас, ботаҡ, тыныс, тыныслыҡ, ҡәҙерле, яҡын, татыу, татыулыҡ, үрсемле, сер, дәүләт, ил, килешеү, аҡса, байлыҡ, әрәм булыу, үҙ күреү, яҡын итеү, иренмәү! күгәрсен, аҡ күгәрсен, тыныслыҡ ҡошо, йөрәк, мәрхәмәтлек, кәңәш, йомош, тәҡдим, йылмайыу, майҙан.

Диалог темалары:

Башҡортостан тәбиғәте.

Мәғрүр Урал тауҙары.

Йәйге күренештәр.

Йәйге ял.

Йәйге хеҙмәт, һыу буйында.

Олатай менән өләсәй янында.

Тәбиғәттең һеҙ яратҡан мөйөшө.

Ауылдан, ял һәм хеҙмәт лагерынан өйгә, атай-әсәйгә хат яҙыу, йәйге күренештәрҙе сағылдырған материал буйынса диктант яҙыу.

**Тематик план**

| № | Бүлектәр | Сәғәт һаны |
|---|---|---|
| 1. | Мәктәпкә барабыҙ | 9 |
| 2. | Көҙгө эштәр һәм көҙгө күренештәр | 9 |
| 3. | Өфө менән танышыу | 8 |
| 4. | Хеҙмәт төбө - хөрмәт | 9 |
| 5. | Ҡыш | 12 |
| 6. | Салауат Юлаев - халҡыбыҙҙың милли батыры | 5 |
| 7. | Йәмле яҙ, һағындыҡ һине! | 6 |
| 8. | Беҙ ҡайтырбыҙ йондоҙҙарға әүерелеп... | 4 |
| 9. | Ай Уралым, Уралым ... | 8 |
| | Бөтәһе | 70 |

**Уҡыу предметын үҙләштереүҙең шәхсән, метапредмет, предмет һөҙөмтәләре.**
**«Башҡорт теле” предметының өйрәнеү һөҙөмтәләре.**

Төп мәктәп сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теленән программаһы үҙләштереүҙең шәхси һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли-мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләтлектәрен һәм шәхестең мораль- этик сифаттарын үҫтереүҙә туған телдең ролен, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; туған телгә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәр үҙ камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасына эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтеү һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең метапредмет һөҙөмтәләре булып:

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

аудирование һәм уҡыу:

- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);

- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт-дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
- стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;
һөйләү һәм яҙыу:
- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
- тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
- төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына карап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
- төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалог (этикеты һүҙ эсенә алған, диалог-һорашыу, диалог-аралашыуға өндәү, диалог-фекер алышыу һ.б; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүен) үҙләштереү;
- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралшыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
- телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
- уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;
- үҙ тиңдәштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау; бәхәстә, төрлө аргументтар ҡулланып, көнүҙәк проблемалар буйынса сығыштарҙа ҡатнашыу;
2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; туған телде башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу; тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара (сит тел, әҙәбиәт һ.б. дәрестәрҙә) ҡулланыу;
3) аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуацияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләпггреү.
Предмет һөҙөмтәләре:
1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәттең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2) гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
3) туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле; фукциональ- мәғәнәүи телмәр төрҙәре (хикәйәләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү); текст, текст төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү;
5) башҡорт теленең лексиксикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;
7) һүҙгә төрлө анализ төҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
8) тел-һүрәтләү саралары һәм улар ҙы үҙ телмәреңдә ҡулланыу;
9) туған телдең эстетик фукцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

**Уҡыу процесын укыу-укытыу методик һәм матди-техник яктан тәьмин итеү**
**Методик ҡулланмалар һәм дәреслектәр.**

**Уҡытыусы өсөн:**

1. Башҡорт теленән прграмма. (Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 1 – 11 кластары өсөн) Төҙөүселәре: Ғәбитова З.М., Усманова М. Ғ., Ижевск - 2008.
2. Башҡорт теле. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8-се класс уҡыусылары өсөн дәреслек. Авт.: Ғәбитова З.М., Усманова М. Ғ., Өфө - 2006
3. Башҡорт теленән диктанттар һәм изложениелар йыйынтығы. М. Ғ. Усманова., З. М. Ғәбитова. Өфө – 2009
4. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 7-8 - се кластары өсөн Башҡорт теле дәреслегенә методик күрһәтмәләр. Авт.: З. М. Ғәбитова, Өфө - 2006
5. Башҡорт теле грамматикаһы таблицаларҙа һәм схемаларҙа. Авт.: Усманова М. Ғ., Өфө – 2007
6. Башкирско – русский и русско-башкирский учебный словарь с грамматическим приложением. Авт.: Саяхова Л., Усманова М., Санкт-Петербург – 2007
7. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь. Ф. Г. Хисамитдинова, Р. Т. Муратова. – Уфа: “Маленький гений Башкортостана”, Учебно-методический центр “Эдвис”, 2006
8. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. – Дәүләтшина М. С., Ғәбитова З. М.. – Өфө: Китап, 2011
9. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. – Дәүләтшина М. С. – Өфө: Китап, 2010
10. Грамматика башкирского языка для изучающих язык как государственный. – Усманова М. Г. – Уфа, 2006
11. Башҡортса – урыҫса темалар буйынса һүҙлек. Авт.: Усманова М. Ғ., Уфа - 2005
12. Башкирско – русский и русско-башкирский учебный словарь с грамматическим приложением. Авт.: Саяхова Л., Усманова М., Санкт-Петербург – 2007 Журнал. Аҡбуҙат.
13. Күңелле минуттар. М. И. Баһауетдинова. Өфө - 2010
14. Телдең күркәмлек саралары. Күнегеүҙәр менән. Псәнчин В. Ш. Өфө – 2003
15. Телмәр һәм зиһен. Р. Ғ. Аслаева. Өфө, Китап - 2005
16. Әкиәт – хыял асҡысы, йомаҡ – зиһен асҡысы. Ф. Нәҙершина. Өфө, Китап – 2007
17. Мәктәптә башҡорт телен уҡытыу методикаһы: норматив методика. Р. Ғ. Аҙнағолов– Өфө: БашДУ, 2010.
18. Мәктәптә башҡорт телен уҡытыу методикаһы. Р. Ғ. Аҙнағолов– Өфө: Китап, 2011
19. Хәҙерге дәрес. Уның этаптары, төрҙәре: уҡыу ҡулланмаһы. Р. Ғ. Аҙнағолов. – Өфө: БашДУ, 2010
20. Башҡорт теле һәм туған әҙәбиәт дәрестәрен үҙ – ара бәйләнештә уҡытыу. М. Б. Юлмөхәмәтов. – Өфө, Китап, 2008.
21. Башҡортса – урыҫса этнокультурологик лексика һүҙлеге. М. И. Баһауетдинова. Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте,2003
22. Ерле һөйләш шарттарында башҡорт теленә өйрәтеү методикаһы. Р. Ғ. Аҙнағолов. – Өфө: Китап, 2006.
23. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уктыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр. – З. М. Ғәбитова, Х. А. Толомбаев. – Өфө: Башҡортостан, 2006.
24. Башкирский язык в таблицах, схемах и определениях. Абубакирова З. Ф. – Уфа, 2010

25. Башҡорт теле. Мәктәп уҡыусылары, уҡырға инеүселәр, уҡытыусылар өсөн ҡулланма. Ҡағиҙәләр, тестар. Усманова М. Ғ., Абдуллина Ф. Ф. – Өфө: Китап, 2008.
26. Уҡыусы шәхесен үҫтереүҙең лингводидактик нигеҙҙәре. Р. Ғ. Аҙнағолов. – Өфө: Китап, 2011.
27. Лингвокультурологическая концепция обучения башкирскому языку и родным языкам в образовательных учреждениях Республики Башкортостан. Самситова Л. Х. – Уфа, 2010.
28. Концепция национального образования в Республике Башкортостан. – Уфа, 2010.
29. Урыҫ мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыуҙы ойоштороу буйынса методик кәңәштәр. – З. М. Ғәбитова, Х. А. Толомбаев. – Өфө:Башҡортостан, 2006.

**Уҡыусы өсөн:**

1. Башҡорт теле. Уҡытыу рус телендә алып барылған мәктәптәрҙең 8 - се класс уҡыусылары өсөн дәреслек. Авт.: Ғәбитова З.М., Усманова М. Ғ., Өфө – 2006
2. Башкирско – русский и русско-башкирский учебный словарь с грамматическим приложением. Авт.: Саяхова Л., Усманова М., Санкт-Петербург – 2007
3. Русско-башкирский, башкирско-русский словарь. Ф. Г. Хисамитдинова, Р. Т. Муратова. – Уфа: “Маленький гений Башкортостана”, Учебно-методический центр “Эдвис”, 2006
4. Башкирско – русский и русско-башкирский учебный словарь с грамматическим приложением. Авт.: Саяхова Л., Усманова М., Санкт-Петербург – 2007

**Матди-техник һәм мәғлүмәти-техник яҡтан йыһазландырыу**

**Уҡытыуҙа ҡулланылған техник саралар:**

Ноутбук
Проектор
Телевизор
Магнитофон
DVD

**Интернет ресурстар:**

http://huzlek.bashqort.com
http://mfbl.ru/mfbl/bashrus
http://bashkir_russian.academic.ru
bashklip.ru›site/bashgram.pdf
http://tel.bashqort.com/short-grammar
https://ru.wikipedia.org/wiki/Грамматика_башкирского_языка
http://sdo.bspu.ru/mod/page/view.php?id=207
http://blang.ru
http://www.tugantel-tv.ru